*Зіәрү КАМАЛОВА*



# БАТЫРҒА АРНАЛҒАН ИЖАД

*Рәссам Әмир Солтан улы Арыҫланов сәнғәт һөйөүселәргә иң элек милли батырыбыҙ Салауат Юлаевҡа арналған картиналары менән билдәле. Әлбиттә, уның ижадында тарихи темаға яҙылған картиналар, портреттар, пейзаж күренештәре, натюрморттар ҙа етерлек.*

*Туймазы районының Кәлшәле ауылында тыуып үҫкән Әмир ун ете йәшендә Бөйөк Ватан һуғышына китә һәм Икенсе Балтик буйы фронтының уҡсы дивизияһы составында Ватаныбыҙҙы һаҡлай. Һуғыш юлдары буйлап Латвия, Литва, Эстония ерҙәре аша үтә. Ҡыҫҡаһы, батырлыҡ, батырҙар темаһы ошо мәлдә үк рәссам өсөн изге була. Салауат образы ғүмере буйы тулҡынландыра, һоҡландыра Әмир Солтан улын. Шуға ла батыр образы картинанан картинаға көсләрәк, бөйөгөрәк, гүзәлерәк була бара. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған рәссамы Әмир Солтан улы Арыҫлановтың ижады милли батырыбыҙҙы мәңгеләштереүсе рәссам буларак ҡыҙыҡһындыра беҙҙе.*

Сәнғәт училищеһында уҡығанда уҡ Әмир Салауат Юлаев, уның ижады менән ҡыҙыҡһына башлай, батырҙың бөтә шиғырҙарын ятлап ала, уның һүҙҙәренә яҙылған йырҙарҙы, романстарҙы өйрәнә. Степан Злобиндың киң билдәле романын, Баязит Бикбайҙың «Салауат» поэмаһын ҡабат-ҡабат уҡып сыға, «Салауат Юлаев» фильмында төп ролде башҡарған танылған актер Арыҫлан Мөбәрәков менән йыш осраша. Бирәһе килгән ҡолона сығарып ҡуйыр юлына, тигән кеүек, тап ошо мәлдә Әмирҙең тормошона Салауат образы көтөлмәгән рәүештә килеп инә. Әле ул саҡта йәш рәссам булған Алексей Кузнецов (1927-1990) «Салауаттан һорау алыу» тигән картина яҙырға ниәтләй. Уға башҡорт батырының йөҙөн, буйһынын кемгәлер ҡарап яҙырға кәрәк була. Рәссам Салауатҡа тиң булырлыҡ кешене эҙләй... Һәм таба. Өфө сәнғәт училищеһында уҡып йөрөгән Әмир Арыҫланов булып сыға ул. 27 йәшлек фронтовик егеттең тышҡы ҡиәфәте генә түгел, бар булмышында сағылған урғылып торған көс, дәрт, дарман, киң күңеллелек, ғорурлыҡ, саялыҡ, шул уҡ ваҡытта зыялылыҡ йәлеп итә Кузнецовты. Әмир иһә батыр образын һынландыра алыуына сикһеҙ шат: көн дә дәрестәр тамамланыу менән опера һәм балет театрына — үҙенең «эш» урынына йүгерә. Салауат булып кейенә, уның кеүек мөһабәт һәм ҡыйыу ҡиәфәттә сәғәттәр буйы баҫып тора.

Училищены тамамлағас, Әмир Арыҫланов үҙ ижадын Салауат образынан башларға ҡарар итә, эске бер ярһыу менән үҙенең картиналарында батырҙы һүрәтләй. Уны күҙ алдына баҫтырырлыҡ кешеләр эҙләп, ҡала урамдарында йөрөй, хатта батырҙың тыуған яғы Салауат районына ла бара. Әммә таба алмай. А.Кузнецов миҫалында образды үҙенә ҡарап яҙа башлай.

Рәссамдың визит карточкаһы булған «Салауаттың Әминә менән хушлашыуы» картинаһы уның Салауат тематикаһын башлап ебәрһә, артабан был образ «Салауат Юлаев» (1959), «Салауат Юлаев һәм Пугачев башҡорт яугирҙәре менән» (1965), «Салауат Юлаев Пугачев менән» (1972) картиналарында сағылыш тапты. Ғөмүмән алғанда, Әмир Солтан улы Арыҫлановтың Салауат Юлаевҡа бағышланған ун картинаһы иҫәпләнә. Улар араһында тамамланмағандары, варианттары ла бар. Картиналарының ҡайһы берҙәре — Салауат районы үҙәге Малаяҙҙа, Салауат Юлаевтың ме-

мориаль йорт-музейында, ҡайһылары — Бөрө, Туймазы, Октябрьский ҡалаларында, Ҡырмыҫҡалы районының Сахай һәм Һәүәләй ауылы мәҙәниәт һарайҙарында һаҡлана.

Рәссам ижадына арналған күргәҙмәләрҙә йыш ҡына уның ике картинаһы ҡуйыла: «Салауат Юлаев» (журнал тышлығының 1-се битендә) һәм «Салауат Юлаев Пугачев менән» (журналдың 185-се битендә ҡарағыҙ). Әйҙәгеҙ, уларға күҙ һалайыҡ.



*Рәссам Әмир Арыҫланов*

...Аҡбуҙатына атланған һәм үҙ отрядының алдында барған Салауат ҡаялы тау башына менеп туҡтаған да тыуған төйәгенең икһеҙсикһеҙ киңлектәренә бағып тора. Башын ғорур сөйгән, ҡарашында — йәштәрсә саялыҡ, ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек, ҡуйған маҡсатына ынтылышлы булыуы йөҙөнә сыҡҡан. Ярһыу аҡбуҙ атының йүгәнен ғәййәр тотҡан. Бар булмышы — ғорур тау бөркөтө. Рәссам был һыҙатты тағы ла көсәйтер өсөндөр, болоттар араһында тау бөркөтөн дә һынландырған. Батыр менән ат — икеһе бер бөтөн. Салауаттың бер һыҙғырыуы булһа, аты ҡанатланып ер өҫтөнән осоп китер төҫлө. Картиналағы бар нәмә: ғорур һәм тәүәккәл Салауат та, ташҡындарҙы, дауылдарҙы осоп үтәр Аҡбуҙат та, аҡ болоттар ҙа, улар араһында ҡанат йәйеп осоусы бөркөт тә халҡыбыҙҙың азатлыҡ өсөн көрәштә еңеүгә ихтыяр көсөн сағылдырыуға булышлыҡ итә.

Милли батырыбыҙға арналған тағы бер картинаһына туҡталмайса мөмкин түгел рәссамдың. «Салауат Юлаев Пугачев менән» тип атала ул. Был картинала ла Салауат төп фигура булараҡ һынлана, Пугачев — икенсе планда. Ләкин был Емельян Пугачевтың баш күтәреүселәрҙең етәксеһе булараҡ ролен кәметмәй. Киреһенсә, дәртле һәм дарманлы, ҡыйыу һәм тәүәккәл йәш батырға ышанысы, өмөт бағлауы сағыла. Пугачев иһә көслө шәхес, тәжрибәле яугир булып күҙ алдына баҫа. Уның ҡырыҫ йөҙөндә рух ныҡлығы ла, хәүефләнеү ҙә, еңеүгә сикһеҙ ынтылыш һәм ышаныс та сағыла. Улар юлдаштар, көрәштәштәр, яуҙаштар.

Төрлө яҡтан — тауҙарҙан, үҙәндәр буйлап улар янына һөңгөләр, ҡылыстар, уҡ-һаҙаҡ менән ҡоралланған башҡорт яугирҙәре ағыла...

Ике картинаһында ла рәссам шул осорҙоң хәүефтәрен, көрәшкә күтәрелгән халыҡ юлбашсыларының ҡыйыулығын, ихтыяр көсөн асыҡ сағылдырыуға өлгәшкән.

Артабан Әмир Солтан улы Салауат образын тағы бер картинаһында — бер төркөм башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте эшмәкәрҙәре һынландырыласаҡ эшендә лә күрһәтергә ниәтләй. Байтаҡ йылдар күңелендә йөрөткән был уйын ул ғүмеренең һуңғы йылдарында ғына тормошҡа ашыра башлай һәм, үкенескә ҡаршы, тамамларға өлгөрмәй...

Бына шундай ижад емештәре менән ҡыуандырғайны беҙҙе рәссам Әмир Арыҫланов. Ижадын батырыбыҙ Салауатты һынландырыуҙан башлаған рәссам бар эшмәкәрлеген ошо образға арнаны. Был үҙе бер батырлыҡтыр ул.